*Миңниса БАҺУМАНОВА*

# Әҙәби алымдар оҫтаһы

Әмир Әминевты мин башҡорт әҙәбиәтендә әҙәби алымдарҙы яңыртыусы, прогрессив идея индереүсе, әҙәби үҫешкә ҡамасаулап, ҡалыплаша барған иҫке ҡараштарҙы емереүсе тип иҫәпләйем. Быны китапхана-ара конкурста иң уҡымлы яңы китап номинацияһында уның “Ҡапҡа” тигән повестар һәм хикәйәләр йыйынтығы икенсе урынды яулағанда уҡ тойғайным. Әммә башҡа әҫәрҙәрен алып уҡырға ҡул етмәгәс, фекерем менән бүлешмәнем. Хәҙер инде хаҡлы ялда шуны ослап, күҙәтеү мәлендә табылған дәлилдәр аша фекеремде нығытып ҡуймаҡсымын.

Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға ингәс, беҙҙе, беренсе курс студенттарын, Ғафури районына хеҙмәт семестрына ебәрҙеләр. Шуға күрә Әмирҙең әҫәрҙәрендә тыуған еренең тәбиғәтенә булған тәрән тойғоларын тасуирлауы мине лә һоҡландыра. Яҙыусы уларҙы “бөҙрә” һүҙҙәр менән түгел, тәбиғи тыныслыҡ аша, әүҙем генә тасуирлай белә. Еҙем, Мағаш, Арғынйәш кеүек аныҡ ер-һыу атамалары әҫәрҙәрен уҡыусыға яҡынайтыуҙа мөһим роль уйнай. Бер ҙә юҡҡа халҡым “Алтын-көмөш яуған ерҙән тыуған-үҫкән ил яҡшы” тип һанамай. Автор шул уҡ ваҡытта тыуған яҡтарында халыҡ телендә һаҡланған хикәйәт-легендаларҙы бик ҡулай ҡуллана, уларҙың тәрбиәүи көсө ҙур икәненә инана.

Әминев хикәйә-повестарына мәғәнәүи яҡтан ифрат ҡеүәтле атамалар таба белә: “Ташҡын алып киткән муйыл”, “Ҡапҡа”, “Сиңерткә”, “Ҡытай-город”, “Йәтәс” һәм башҡалар. Уларҙың билдәле бер тәрән төшөнсәгә эйә булған эске йөкмәткеләре бар: өҙөлгән яҙмыш, сикләнгән тормош, еңел-елпе һөнәр, һаҡ аҫтына алынған яҙмыш һәм башҡалар. Бында тотош айырым әҫәрҙең бөтә асылы, булмышы сағыла. Шул йәһәттән ул уҡыусы иғтибарын тартып тора.

Әмир әҫәрҙәрендәге ваҡиғаларҙы ғәҙәттә беренсе заттан тасуирлай, бер ваҡытта ла ситтән күҙәтмәй, геройҙарының исем-шәрифтәрен һәр ваҡыт диалогтар аша аса. Мәҫәлән, “Эх, һин, исеме Азат тигән булаһың тағы” (“Ташҡын алып киткән муйыл”, 5-се бит); “Ҡәртә аша күрше инәйҙең һөйләшкәне ишетелде:

— Ҡеме килгән икән Хәсән кейәүҙең?.. — Унан ҡапыл танып: — Әһә, Әхмәт ҡоҙаның улы түгелме...” (“Турат”, 18-се бит).

Иң кәттәһе — “Биштирәк” хикәйәһендә Әмирҙең бала теле, фекере һәм тормошто танып белеүе аша тасуирлауы. Шулай итеп, уның хикәйә-повестарында беҙгә таныш төрлө йәштәге, төрлө һөнәр эйәләре, ябай ауыл кешеләре менән осрашаһың.

Хаттар йыйылмаһынан торған йә көндәлек кеүек формалар әҙәбиәтебеҙҙә киң ҡулланыла. Әммә Әмирҙең геройы өлкән ағаһының тетрәткес тә, иларлыҡ нескә лә, һәр юлы шундай таҙа хистәр менән һуғарылған көндәлектәренә үҙ тойғоларын өҫтәй. Автор бер ваҡытта ла үҙ фекерен аныҡ итеп әйтеп бирмәй, һүрәтләгән ваҡиғаларҙан сығып, уҡыусының үҙенә һығымта яһарға мөмкинлек бирә.

“Ике ҡыш, ике яҙ...” хикәйәһенә Әмир “Йәш һалдат яҙмалары” тигән өҫтәлмә атама ҡушҡан. Был үҙе әҫәр йөкмәткеһен бер талай аса. Халыҡ тормошо менән тығыҙ бәйле әҫәрҙәрендә бөтә төр һөнәр эйәләрен һүрәтләгән, әрмелә хеҙмәт итеп ҡайтҡан Әминев һалдат тормошон тасуирлауҙан баш тартамы һуң?!

Әминев повестарында тормоштоң үтә лә ҡатмарлы мәсьәләләрен күтәрә. Мәҫәлән, ауыл кешеләренең трагик яҙмышы тасуирлана. Бигерәк тә “Ҡытай-город” повесы был яҡтан авторҙың яңы табышы булып тора. Повесть фантазияға ҡоролоп, бөгөнгө тормоштоң асылын күрһәтә. Ергә, ижади хеҙмәткә хоҡуғын юғалтҡан миллиондарҙың фажиғәһе күҙ алдына баҫа: улар тыуған төйәге, йәмғиәте менән бәйләнештән мәхрүм, айырылған һәм бүленгән. Бер яҡтан, минеңсә, автор империяларҙың ҡасан да юҡҡа сығырына ташлама яһай. Ниндәй ҙур Ҡытай дәүләтенең ярсығы икенсе дәүләттә барлыҡҡа килһен әле! Ә Рәсәй ҙә бүленмәҫ, тарҡалмаҫ тигән гарантия ла юҡ бит. Башҡортостан еренә ҡытайҙарҙың күсеп ултырыуын тасуирлап, ана шул хәүефле ваҡиғаларҙан алдан ҡурсаларға тырыша автор. АҠШ, башҡа капиталистик илдәрҙә ерле халыҡты көсләп алама ерҙәргә күсереп ултырталар. Улар аслыҡтан-ялanғаслыҡтан әкренләп үлемгә дусар ителә. Рәсәйҙә лә күп халыҡтар депортацияланды. Халыҡты ана шулай язалау ысулын да тасуирлай түгелме Әмир?! Уның фараз ителгән образдары шул тиклем сағыу, әһәмиәтле, психологик яҡтан төҙөк һәм килешле. Ижади фараз ҡылыу ярҙамында әҫәр формаһының киңәйеүе, Әмирҙең сюжет ҡороуҙың яңы принциптарын табыуы, тыуған төйәген юғалтҡан, бер ниндәй хоҡуғы ҡалмаған бөгөнгө колхозсыларҙың — беҙҙе ашатҡан кешеләрҙең аҡылдан яҙыр сиккә етерҙәй психик кисерештәрен фантазия ярҙамында көсәйтеп биреүе һоҡландыра. Үҙәгендә Фәйзулла ҡарт торған повеста йөҙләгән ваҡиғалар тығыҙ тупланған, әйткәнебеҙсә, бөгөнгө сәйәси тормоштоң горизонттары киңәйгән, тамырҙары тәрәнәйтелгән. Бер колхоз яҙмышы аша тотош дәүләт проблемалары күтәрелә. Ерен юғалтҡан халыҡтың киләсәгенә бәйле глобаль мәсьәлә алға килеп баҫа. Бынан тыш, әҫәрҙәрҙә бөгөнгө заман тыуҙырған пенсия йәки эш хаҡы ала алмау, кешенең кешегә ҡарата мөнәсәбәтенең үҙгәреше, бер-береңә ҡарата вайымһыҙлыҡ (ярҙам итмәү, яҡлап һүҙ әйтмәү, битарафлыҡ), ваҡлыҡ, аҡсанан башҡа нәмәне белмәү, һуғыш ветерандарын һанға һуҡмау, өлкәндәрҙең йортһоҙ ҡалып урамға сығарып ташланыуы, эскелек, әхлаҡи боҙоҡлоҡ кеүек бик күп мәсьәләләр ҡуҙғатыла. Тормошобоҙҙоң ҡара таптарының асылын аңлайым тиһәң, Әмирҙең әҫәрҙәрен уҡыу ҙа байтаҡ күҙҙе асырға ярҙам итә.

Автор башҡорт теленең һирәк ҡулланылған һүҙҙәрен дә иҫкә төшөрөргә онотмай: “тәрән ултыртылған сәгер күҙле”, “һикегә һуйлайғанын да онотоп”, “кәртә төрәкәләп ҡуйҙы”, “яшыҡ бәләкәй кәүҙәһе”, “ҡарсығының йәнасыҡҡа ҡысҡырған тауышы” һәм башҡалар.

Мин Әмир Мөхәммәт улы Әминевтың һәр әҫәренә лә күҙәтеү яһауҙы маҡсат итеп ҡуйманым, шуға күрә уның “Мең дә бер ғазап”, “Танкист” повестары, “Өс ете”, “Бүре балалары”, “Сөүгөл” кеүек хикәйәләре, ғөмүмән, тотош ижады тәнҡитселәр тарафынан тәрәнерәк өйрәнелеүенә өмөт итәм.

Йомғаҡлап, шуны әйтә алам: Әмир Әминев, үҙенең бай тормош тәжрибәһенә таянып, үҙ заманының тын алышын, ҡаршылыҡтарын тәрән тойоп, сюжет, композиция, форма, жанр төрлөлөгө өлкәһендә ныҡышмалы эҙләнә, нығынған ҡалыптарҙа яҙыуҙан ситләшеп, әҙәбиәтебеҙгә фантазияға ҡоролған өр-яңы алымдар алып килде.